# ”ВЛАСТЬ ВЕРТИКАЛЕ” ҺӘМ МИЛЛИ МӘСЬӘЛӘ

*Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының үҙған 2004 йылдағы һуңғы киңәйтелгән ултырышы быйыл, 2005 йылда, III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы йыйыласағы тураһында белдерҙе.*

*Башҡарма комитет рәйесе профессор **Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов** алдағы оло йыйын тураһында түбәндәгеләрҙе әйтеп үтте:*

— Бынан ун йыл элек, 1995 йылдың июнендә үткәрелгән I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы халҡыбыҙҙың һәм республиканың сәйәси, социаль, иҡтисади һәм мәҙәни хәленә, үҫешенә ҡағылышлы мөһим программа документтары ҡабул итте. 2002 йылда үткәрелгән II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, етди үҙгәрештәр кисергән ижтимағи-сәйәси хәлдән сығып, яңы мәсьәләләр ҡуйҙы. Һуңғы осорҙағы үҙгәрештәр ҙә ҡоролтай эшмәкәрлегенә көслө йоғонто яһап килә. Яңы шарттарҙа уңышлы эшләү өсөн, төп документтарға, уставҡа мөһим үҙгәрештәр индереү талап ителә. Быны ҡоролтай йыйып ҡына хәл итергә мөмкин.

Бөгөнгө ижтимағи-сәйәси хәлдән сығып ҡарағанда, беҙҙе етди, ныҡлы һөйләшеү көтә. Күреп тораһығыҙ, билдәле көстәр тарафынан республикаларҙың суверенитетына, шул иҫәптән Башҡортостан дәүләтселегенә ҡаршы ысын һөжүм ойошторолдо. Был шарттарҙа нисек үҙебеҙҙең хоҡуҡтарҙы яҡлап алып ҡалыу тураһында ныҡлап уйлашырға кәрәк.

Төбәктәрҙәге ҡоролтай хәрәкәте, милләттәштәребеҙҙең йәшәйеше тураһында ла етди һөйләшеү талап ителә. Беҙгә милли-мәҙәни автономиялар менән генә сикләнергә тәҡдим итәләр. Әммә уныһы төрлө төбәктәрҙәге диаспораларға ҡарата ғына хоҡуҡи яҡтан нигеҙлелер. Элекке тарихи Башҡортостан территорияһында йәшәгән, үҙ ерендә көн күргән башҡорттар — ул төбәктәрҙең аҫаба, автохтон халҡы. Улар үҙ ерендә сәйәси, иҡтисади, социаль хоҡуҡтарының үтәлеүен талап итә ала, ә мәҙәни хоҡуҡтар менән генә сикләнеү дөрөҫ булмаҫ ине. Әйтәйек, тел менән бәйле хоҡуҡтар милли-мәҙәни сфера менән генә сикләнмәй. Шуға күрә төбәктәрҙәге ҡоролтай хәрәкәтен нығытыу мөһим мәсьәлә булып ҡала.

Беҙҙе республикалағы миграция процестары ла борсоуға һала. Сит милләт вәкилдәре Башҡортостанға күпләп килеп төпләнә, шул уҡ ваҡытта башҡорттар республиканан ситкә китә. Бер Төмән өлкәһендә генә 60

мең башҡорт йәшәй. Хәҙер халыҡ унан китә башланы, ләкин милләттәштәребеҙ Башҡортостан ҡалаларына түгел, ә күрше өлкәләргә ҡайта. Ошо процестар башҡорт халҡының республикалағы демографик хәлен артабан ҡатмарлаштыра.

Ер реформаһына ҡағылышлы проблемалар ҙа әлегә бик ауыр хәл ителә, ә ул мәсьәлә ауыл халҡының киләсәге менән бәйле. Икенсе яҡтан, ерҙе юғалтыу — республиканы юғалтыуға тиң ул.

Башҡорт теле менән бәйле проблемалар ҙа байтаҡ йыйылды, күбеһе оҙаҡ ваҡыт хәл ителмәй килә.

Әммә беҙҙе бөгөнгө көндә иң борсоғаны — Рәсәй Федерацияһы составындағы республикаларға ҡаршы ойошторолған һөжүмдең көндән-көн көсәйә барыуы, халыҡтарҙың киләсәгенә янаған хәүеф. Хәл ысынлап та шул хәтлем хәүефле — мин уны бер һүҙ аша ғына еткерергә теләр инем. Күренекле чех яҙыусыһы, демократ Юлиус Фучиктың: ”Кешеләр, уяу булығыҙ!” тигән һүҙҙәре менән. Быны мәғәнәһе бөтәгеҙгә лә аңлашылалыр. Ошо темаға Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихын өйрәнеү буйынса комиссияһы рәйесе, профессор Ҡолшәрипов сығыш яһаясаҡ. Башҡарма комитет Марат Мәхмүт улының сығышы буйынса тейешле ҡарар ҡабул итте.

*Бөтә донъя башкорттары королтайы Башкарма комитетының Башкортостан һәм башкорт халкы тарихын өйрәнеү буйынса комиссияһы рәйесе* ***Марат Мәхмүт улы Ҡолшәрипов:***

— Һуңғы осорҙағы ваҡиғаларҙы барлап, яҡын киләсәккә прогноз яһап ҡараһаң, Рәсәй Федерацияһында көйлө, тыныс тормош, үҫеш өсөн бик уңайлы перспективалар асылған һымаҡ. Думаға һайлауҙар, президент һайлауҙары, нисек кенә булмаһын, ярайһы уҡ тыныс үтте. Хәҙер артабан тыныс ҡына эшләргә кәрәк. Әммә беҙ шундай илдә йәшәйбеҙ — бында көсөргәнешлек бер ҡасан да кәмемәйәсәк. Сәбәбе — Рәсәйҙең империясыл асылында, уның тәбиғәтендә. Әммә һуңғы осорҙа тарихтан килгән сәбәпте йәшереп, проблеманы баштүбән ҡуйып хәл итергә ынтылыш көсәйә. Әүәлге империясыл сәйәсәттән баш тартаһы урынға, уны, киреһенсә, көсәйтеп, үҙҙәре ошо сәйәсәт ҡорбаны булған халыҡтарға, уларҙың милли дәүләтселектәренә ҡаршы көслө һөжүм ойошторҙолар. Әлбиттә, күп нәмә аҫтыртын эшләнә, ул турала артыҡ һөйләмәҫкә тырышалар. Инде күп йылдар рәттән Жириновский, Рогозин кеүектәрҙе алдан ебәреп, халыҡтың, милли республикаларҙың реакцияһын ҡапшап ҡарайҙар. Был икәү иһә хәҙер иң популяр ”телегерой” булып китте, телеэкрандан, матбуғат биттәренән төшмәйҙәр. Уларға, урыҫтар үҙҙәре әйткәнсә, ваҡытында тейешле ”отпор” биреп тороусы юҡ. Ә ниңә юҡ? Улар бит дәүләттең бөгөнгө федератив ҡоролошо нигеҙҙәренә, конституцияһына ҡаршы эш итә, уларҙы емертә, йәғни енәйәти ғәмәл ҡыла! Ә ҡайҙа беҙҙең депутаттар, беҙ бит уларҙы Думала Баш-

ҡортостан мәнфәғәттәрен яҡлар өсөн һайлағанбыҙ?! Бәлки, ниндәйҙер эш алып барылалыр, әммә әлегә халыҡ уны күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә. Был өлкәлә асыҡлыҡ һәм актив позиция талап ителә. Жириновский менән Рогозин кеүектәр һәр телмәрен "Карфаген юҡ ителергә тейеш!" — тип тамамлаған Рим императоры Катонға тиңләшергә тырыша. Методтары примитив һәм гел бер төрлө, әммә Рәсәй шарттарында, күрәһең, улар эффектлы. Улар үҙ халҡына ниндәй идеялар һеңдерә һуң? Тарихи ысынбарлыҡты ғына түгел, хатта ябай логиканы ла инҡар итеп, улар үҙ халҡының аңын томалап, йәнәһе, бөгөнгө Рәсәй Федерацияһы борондан урыҫтың ғына дәүләте булған, ә бөгөнгө республикалар — ни бары "Рәсәй тәнендәге яман шеш кенә" (Жириновский терминологияһы буйынса: "злокачественные образования на здоровом теле России") һәм уларҙан арыныу талап ителә, тип ышандырырға тырыша. Күптәр был икәүҙе етди ҡабул итмәҫкә мөмкин — улар ни бары "сәйәси клоун", "сәйәсмән-шоумен" тип иҫәпләй. Был хаталы фекер генә түгел, ә проблеманан бөтөнләй ситкә китеү. Шуныһына иғтибар итегеҙ: был икәү беренсе булып ҡысҡырып йөрөгәнде күп тә үтмәй Кремль даирәләрендә, Президент администрацияһында һүҙмә-һүҙ ҡабатлап, реаль сәйәси әйләнешкә индерәләр һәм ғәмәлгә ашырырға тотоналар. Йәнә, улар Думала үҙ фракцияларын етәкләй, парламент структураларында юғары вазифалар биләй, дәүләт сәйәсәтенә йоғонто яһай.

Республикаларға ҡаршы йүнәлтелгән был һөжүмде ойоштороусылар хәҙер үҙҙәре лә асыҡтан-асыҡ сәйәси аренала күренә башланы. Мәҫәлән, ноябрь айында Рәсәй Президенты администрацияһы етәксеһе урынбаҫары Владислав Сурков "Комсомольская правда" гәзитенә биргән интервьюла: "Рәсәй федерализмы милли-территориаль принциптарҙан сығып ҡоролорға тейеш түгел", — тип белдерҙе. Ә был инде рәсми позицияны белдереү. Йәнә бер миҫал. Беҙҙә төп рәсми баҫма иҫәпләнгән "Российская газета"ның 8 декабрь һанында шул уҡ фекер һүҙмә-һүҙ ҡабатлана. Был идеяны таратыусы әфәнделәр Рәсәй империяһының күрше халыҡтарҙың территорияларын баҫып алыу иҫәбенә генә киңәйеүен онотторорға тырыша. Донъя картаһынан миҫалдар килтереп, асыҡтан-асыҡ ялғанға баралар һәм: "Рәсәй Федерацияһы кеүек берекмәләр ер йөҙөндә юҡ", — тип ныҡышалар. Улар өлгө итеп АҠШ-ты йыш күрһәтә, әммә ул федератив дәүләт — бөтә донъянан йыйылған мигранттар иле. Ә күрше Канадала ғына француз теллеләрҙең Квебек провинцияһы йәшәп килә. Демократия өлгөһө иҫәпләнгән Бөйөк Британия составында суверенлы Шотландия, Уэльс, Төньяҡ Ирландия бик ҙур үҙаллылыҡҡа эйә. Ҡытайҙа Тибет, Синцзян-Уйғыр автономиялы округтары, Испанияла Каталония, Басктар иле — суверенлы территориялар. Донъяла бындай миҫалдар бихисап, әммә Мәскәү уларҙы күрергә теләмәй.

Европаның берләшеүенә һылтаныу ҙа нигеҙһеҙ — унда иҡтисади берләшеү генә бар. Англия, мәҫәлән, Европа Союзына бик ынтылып бармай һәм ситтәрәк ҡала.

Беҙҙә ҡайһы берҙә ”милли-мәҙәни автономия” алдаткыс идеяһына еңел генә ышанып баралар. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: сәйәси һәм иҡтисади хоҡуҡтары, дәүләтселек формаһы юҡ ителгән халыҡтарҙың мәҙәниәтен үҫтереү Рәсәйгә нимәгә? Уларҙың бөтә мәҙәниәтен фольклор кимәлендә күрһәтеү өсөнмө? Элекке Советтар Союзында әле халыҡтарҙың милли мәҙәниәтен пропагандалауға көс, аҡса йәлләмәйҙәр ине. Ә хәҙер радиола, телевидениела бер милли көй, бейеү тапшырыу юҡ. Башҡортостандың мәҙәни кимәле бик юғары, һоҡланғыс ҡаҙаныштары бихисап, әммә Мәскәү уларҙы күрергә лә, ишетергә лә теләмәй. Киреһенсә, сәйәси һәм иҡтисади йәһәттән губернияларға тиңләштереп, уның мәҙәни үҫешен сикләй. Губернияларҙан айырмалы, беҙгә үҙебеҙҙең милли мәғариф, фән, мәҙәниәт, нәшриәт, матбуғат системаларын үҫтерергә кәрәк — ул маҡсатҡа тәғәйен финанстар Башҡортостанда ҡалырға тейеш.

Элек Мәскәүҙә, исмаһам, ”портфелһеҙ министр” Рамазан Абдулатипов етәкләгән Милләттәр эштәре буйынса министрлыҡ бар ине, уны ла бөтөрөп ҡуйҙылар. Алмашҡа төҙөлгән Региональ үҫеш министрлығы үҙенең төп маҡсатын әлегә республикаларҙы ликвидациялауҙа ғына күрә. Киң мәғлүмәт саралары Башҡортостан менән Татарстан тураһында яҡшы һүҙ әйткәне юҡ хәҙер, фәҡәт негатив фекер тараталар. Был турала дөрөҫөн әйтһәң, милләтсе, экстремист ярлығы тағыла. Баҫым артҡандан-арта, һәм беҙ үҙебеҙҙе Рәсәйҙә комфортлы тоймайбыҙ.

Һуңғы ваҡытта беҙҙең Татарстан менән мөнәсәбәттәр ҡатмарлашты. Күршеләргә ҡаршы сығыштарҙы кисектермәй туҡтатырға кәрәк, сөнки улар ғәмәлдә ”бүлгелә һәм хакимлыҡ ит” лозунгыһы аҫтында эш итеүселәргә генә файҙалы — ике туғандаш милләтте ыҙғыштырып, иғтибарҙарын ҙурыраҡ хәүефтән ситкә йүнәлтеү маҡсатында ойошторолған нәмә ул. Ә иң ҙур хәүеф — республикаларға һәм халыҡтарға янағаны. Татарстан менән Башҡортостан ул хәүефкә берләшеп ҡаршы торорға тейеш. Ҡазанда быны аңлаған зыялылар, сәйәсмәндәр күп. Етмәһә, унда заманында суверенитет өсөн көрәштә үҙен раҫлаған интеллигенция вәкилдәре, ҡағиҙә булараҡ, парламентта ултыра. Ҡазан тураһында һөйләгәндә, традицияларҙы ла онотторға ярамай. Үткән быуат башында, революцияға тиклемге Думала мосолман фракцияһы нисек уңышлы эшләгәнен дә иҫкә төшөрөргә мөмкин, ә бит ул фракцияла нигеҙҙә Өфө һәм Ҡазан зыялылары төп көстө тәшкил итә. Аҙаҡ шул уҡ шәхестәр республикалар төҙөү өсөн ауыр көрәш алып бара.

Беҙгә республиканы, суверенитетты берәү ҙә килтереп тотторманы, бүләк итмәне, хатта, киреһенсә, беҙҙең үҙаллылыҡҡа төрлөсә ҡаршы торҙолар, аяҡ салдылар. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ күп йүнәлештәрҙә һоҡланғыс уңыштарға өлгәштек. Бөгөн дә беҙҙең төп таянысыбыҙ — үҙебеҙҙең дәүләтселек формаһы кәүҙәләнеше булған республикабыҙ. Уны һаҡлап ҡалыуға барлыҡ көсөбөҙҙө йәлеп итергә тейешбеҙ. Донъя халыҡтары милли азатлыҡ яулау юлында ҙур тәжрибә туплаған, ер йөҙөндәге, донъя картаһындағы бөгөнгө илдәрҙең күпселеге милли-азатлыҡ көрәше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Донъя йәмәғәтселеге бөгөнгө көндә милләттәрҙең хоҡуҡтарын яҡлауҙың демократик, тыныс юлдарын бул-

дырған — беҙ республикабыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн иң тәүҙә шуларҙы үҙләштерергә тейешбеҙ. Үҙебеҙҙең позицияны, маҡсатты тыныс, грамоталы, киң масштабта аңлата башлау талап итеlә. Беҙҙең үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы, дәүләтселегебеҙҙе яҡлаясағыбыҙҙы бөтәһе лә аңларға тейеш. Хаҡлыҡ беҙҙең яҡта. Республиканы яҡлап алып ҡалһаҡ, бөтә ҡаҙаныштарыбыҙ, милли ҡиммәттәребеҙ һаҡланасаҡ, уларҙы артабан үҫтереүгә юлдар асыласаҡ. Беҙҙең алда өс перспектива тора. Береһе — хәрәкәтһеҙ ҡалып, үҙ дәүләтселегебеҙҙе юғалтыу, милләт булараҡ юҡҡа сығыу. Икенсеһе — ”ҡыҙыу нөктә” перспективаһы. Рәсәйҙең бөгөнгө сәйәсәте халыҡтарҙы ошо юлға этәрә. Әммә Башҡортостан менән Татарстан өсөнсө юлды һайланы: тыныс, демократик юл менән милли азатлыҡ яулау, кеше һәм милләт хоҡуҡтарына таянып эш итеү. Бына шуға күрә лә Рогозин, Жириновский кеүектәр беҙҙең ғәмәлдәрҙә һәр саҡ фәҡәт негатив ҡына эҙләй, ә уңыштарҙы, позитив үҙгәрештәрҙе күрергә лә, хатта Башҡортостан, Татарстан исемдәрен ишетергә лә теләмәй. Хәйер, был мөнәсәбәт ғөмүмән Рәсәйҙәге милли сәйәсәткә хас, сөнки унда милли сәйәсәтте хәрби сәйәсәттең бер өлөшө тип кенә ҡарарға өйрәнгәндәр. Беҙҙән ошо юлдан һис тайпылмай, ышаныслы, тыныс, әүҙем хәрәкәт талап итеlә. Беҙ дөрөҫ юлдабыҙ.

Әммә был юлда беҙҙән әүҙем позиция талап ителәсәк. ”Страус сәйәсәте”, киҫкен проблемаларҙан ситләшеү ҙур хәүеф икәнен аңлау мөһим. Йәштәрҙе йәлеп итеү мөһим, әлегә беҙ уларҙы күберәк ситкә этәрәбеҙ. Интеллигенцияның йәмғиәттәге ролен дөрөҫ баһалау юҡ. Быны беҙ үҙебеҙҙең, ошо залда ултырған зыялыларҙың хәленән дә күрә алабыҙ. Әле мин әйткән проблемаларҙы бик аҙҙар күтәрә, тейешле аңлатыу эше алып бара. Әйтәйек, үҙемде алғанда, миңә 63 йәш. Әйтелгән проблемаларҙы халыҡҡа еткереү менән бер үҙем шөғөлләнәм тиергә мөмкин. Интернетта сайт астым, мәҡәләләр урынлаштырам. Бөтәгеҙҙе лә ошо эшкә әүҙем ҡушылырға саҡырам. Беҙ хәҙер эште бик юғары кимәлдә, грамоталы алып барырға тейешбеҙ. Бының өсөн иң тәүҙә кеше һәм милләт хоҡуҡтарын гарантиялаған БМО документтарына таянып эш итергә, уларҙы киң пропагандаларға, халыҡҡа еткерә башларға, ошо өлкәләге информация блокадаһын йырып сығырға кәрәк. Беҙҙе замана талаптары шуға этәрә. Күрһәтелгән проблемаларҙан беҙ бер ҡайҙа ла китә алмаясаҡбыҙ. Уларҙы үҙебеҙ хәл итеүҙән ситләшһәк, башҡалар хәл итә башлаясаҡ. Әммә уныһы беҙҙең файҙаға булмаясаҡ.

## РЕШЕНИЕ
## Комиссии Исполкома МСОО Всемирного курултая (конгресса) башкир по изучению исторического прошлого Башкортостана и башкирского народа

Заслушав выступления доктора исторических наук, профессора М.М. Кульшарипова и других членов Комиссии Исполкома Всемирного курултая башкир по изучению исторического прошлого Башкортостана и башкирского народа, обсудив проекты реформ политической системы Российской Федерации, по су-

ществу направленных под видом укрепления вертикали власти на создание унитарного государства с ликвидацией национальных республик, комиссия пришла к выводу о необходимости довести до общественности свое резкое осуждение политики, направленной на постепенный демонтаж национально-территориальной государственности российских народов. Тем более, что наличие национальных республик соответствует принципу самоопределения народов, включенного в качестве базовой нормы в Устав ООН и декларации Генеральной Ассамблеи ООН. Ликвидация государственности нерусских народов приведет, в конечном счете, к развалу самой Российской Федерации из-за появления новых "горячих точек" в разных регионах страны.

Прочную основу межнационального мира и согласия можно создать в многонациональном государстве лишь при соблюдении интересов не только русского, но и всех других народов РФ.

Достойна резкого осуждения работа центральных СМИ, постоянно и целенаправленно создающих негативное отношение к государственным образованиям нерусских народов, откровенно пропагандирующих шовинистический лозунг "Россия — только для русских".

Считаем, что одиозные политические деятели, руководители фракций Государственной Думы РФ В.Жириновский, Д.Рогозин являются главными идеологами политики ликвидации этнотерриториального федерализма в стране. Их деятельность, направленная на сколачивание вокруг себя наиболее шовинистических сил России, никак не способствует укреплению среди нерусских народов патриотизма, толерантности и интернационализма, а, напротив, служит возбуждению у них антирусских настроений.

Опираясь на вышеизложенное, комиссия пришла к заключению:

1. Выразить серьезную озабоченность по поводу усиления тенденций унитаризации и унификации политической системы Российской Федерации.

2. Выразить уверенность в том, что будущее России как единого государства возможно лишь при правовом демократическом и федеративном ее устройстве.

3. Обратиться к депутатам Государственной Думы из Башкортостана и других национальных республик с призывом занять самую активную позицию в защите интересов национальных государственных образований.

4. Решительно осудить позицию центральных СМИ, направленную на пропаганду идей унитаризации, русификации. Осудить пренебрежительное отношение СМИ к национальным проблемам и нуждам нерусских народов Российской Федерации.

5. Настоятельно требовать создания федерального министерства по делам национальностей (а не министерства регионального развития, которое свою основную задачу видит в ликвидации национальных республик), защищающего интересы всех народов России.

6. Довести до Президента РФ наше мнение о том, что он, как гарант Конституции РФ, призван обеспечить права всех народов Российской Федерации. От научно обоснованного, трезвого и взвешенного решения национальной проблемы зависит будущее Российской Федерации.

*Закир Зиннәтуллин әҙерләне.*